Дөрөҫлөк диндә

СИХЫРСЫЛЫҠ ЙӘКИ НИСЕК ҠАРА КӨСТӘРҘӘН ҺАҠЛАНЫРҒА?

Илшат ҒӘТИӘТУЛЛИН

Совет заманында динһеҙ йәшәп, халыҡта иман, әҙәп-әхләк, оялсанлыҡ, ололарға ҡарата ихтирам, ҡатын-ҡыҙ-ҙарҙың дәрәжәһенә ҡараштар ҡаҡшаны, тип әйтергә була. Эскеселек, фәхишәлек, суицид, ата-әсәләре тере булған «етем» балалар, ҡарттар йортондағы ташландыҡ инәй-бабайҙар һәм башҡа һанап бөткөһөҙ йәмғиәт ауырыуҙары күп бөгөн. Һәм шуларҙың иң ҡурҡыныстарының береһе - ул сихырсылыҡ.

Эйе, халыҡ араһында бөгөнгө көндә киләсәк тормошто юрау, ир-егетте йә ҡатын-ҡыҙҙы сихыр аша үҙеңә ҡаратыу кеүек ғәҙәт тарала башланы. Хатта ауыл әбейҙәре лә был яңы «һөнәргә» өйрәнеп алды. Улар йәш ҡыҙҙарға яҡшы кейәү вәғәҙәләй, ауырыусыларға - тиҙ арала терелеү, түлһеҙҙәргә - бала. Эскелектән арындырыу, юғалған малды эҙләп табыу, дошманды юлдан алып ташлау, көнләшеп йөрөгән күршене ауырыуға һабыштырыу тәҡдим итәләр. Сихырсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр был көстөң ҡайҙан килеүен, үҙҙәренең өҫтөнә ниндәй оло яуаплылыҡ алыуҙарын беләме икән? Уларға ышанған кешеләр тормоштарын, балаларының бәхетен ниндәй көстәргә тапшырғаның аңлаһаларсы... Шәриғәт буйынса, сихыр - ул йәшерен сәбәбе булған, ғәҙәти тәбиғәткә тура килмәгән нәмә, сихыр - яңылышлыҡты дөрөҫ тип алдап күрһәтеү (Үәхид Ғабдүссәләм Әл-Бәлиҙең «Яуыз сихырсыларҙы ҡырыусы үткер ҡылыс» китабыннан). Асыҡлабыраҡ әйткәндә, сихыр - сихырсы менән шайтандарҙың килешеүе, - ул гонаһлы ғәмәл. Уның менән шөғөлләнеүселәр Аллаһ диненә ярамаған эш ҡыла һәм бының өсөн шайтандарҙан ярҙам һорай. Улар, уға ҡайһы бер осраҡтарҙа булышлыҡ күрһәтә. Һәм сихырсы гонаһҡа ни тиклем тәрәнерәк батһа, ен-шайтандар шул тиклем ныҒыраҡ «ярҙам итә». Ҡайһы бер сихырсылар үҙҙәрен мосолман, ти. Әммә улар - Аллаһтан башҡа кемгәлер ышанып, Ҡөрьән китабын тәһәрәтһеҙ йәки киреһенсә уҡып, төрлө ендәргә ҡорбан салып, ябай халыҡты алдап йөрөгән кешеләр. Атап үтелгән ғәмәлдәр уларҙың ни тиклем бысраҡлыҡҡа, хәрәмгә батҡандарын, Аллаһ диненән йыраҡ булыуҙарын асыҡ күрһәтә. Ундайҙарҙы ҙур бәхетһеҙлек көтә - был донъяла ла, ахирәттә лә. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай тигән: «Ә Мине иҫкә алыуҙан баш тартҡан кешенең ысынлап та, тормошо ҡыҫынҡылыҡта булыр...» («Таһә» сүрәһе, 20:124). Ысынлап та, сихырсылар йоҡлай алмай ыҙалай, төндәрен ҡурҡып уяна, уларҙың яуыз эштәренән бөтөн туғандары, балалары яфалана.

«Таң». («Фәләҡ») сүрәһен өлгө итеп килтереү ҙә етә: «Әйт: «Таң Раббыһына һыйынам, Ул барлыҡҡа килтергән нәмәләрҙең яуызлығынан, һәм ҡараңғылыҡтың ҡаплаған ваҡыттағы яуызлығынан, һәм төйөндәргә өрөүселәрҙең (сихырсы) яуызлығынан, һәм көнләшеүсенең көнләшкән ваҡыттағы яуызлығынан!» - тип доға әйтергә ҡушҡан Аллаһы Тәғәлә (Ҡөрьән, 113:1-5). Шулай уҡ, Аллаһ рәсүле (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: «Әгәр кеше сихырсыны йә күрәҙәсене осратып, уларҙың һүҙенә ышанһа, шуның менән ул Мөхәммәткә төшөрөлгәнде (йәғни исдам динен) инҡар иткән булыр» (Әбү Дауыт, Әхмәд Әл-Хәким йыйынтыҡтарынан, сәхих хәҙис).



Шулай итеп, бер Аллаһҡа ышанған мосолман халҡы сихырҙың ярамаған эш, хәрәм икәнен аңларға тейеш. Ошо ғәмәл беҙҙе Аллаһ диненән, Уның рәхмәтенән сығара. Был осраҡта, кем уға ярҙам итә алыр, уны бәхетһеҙлектән ҡотҡарыр, үлем ғазабынан, ҡәбер язаларынан, Ҡиәмәт көнө, Сират күпере, Йәһәннәм ғазаптарынан аралар?!

Ислам - бөтә һорауҙарға ла яуап бирә торған тулы дин. Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, һәм Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - Уның кешеләргә һәм ендәргә ебәргән ҡоло үә рәсүле. Аллаһ Тәғәлә бөтә нәмә хаҡында белә. Әгәр Ул берәүгә, һынап ҡарар өсөн, сихыр буйынса ғилем биргән икән, икенселәргә шул сихырҙы дауалау ысулын да еткергән. Раббыбыҙ Ҡөрьәндә: «Беҙ Ҡөрьәндә имандылар өсөн шифа һәм рәхимлек булған нәмәләр индерәбеҙ», - ти («Төндә күсереү» сүрәһе, 17:82). Билдәле, Ҡөрьән сүрәләре йән ауырыуҙарынан да, тән ауырыуҙарынан да дауа. Ислам динендә йәшәгән, һәр ваҡыт тәһәрәттә йөрөгән, хәрәмдән тыйылған һәм хәләл генә ашаған мосолмандарға сихыр, ендәр бик ауыр ҡағыла. Һәр төрлө зәхмәттән, күҙ тейеүҙән дауалау менән шөғөлләнгән Үәхид Ғабдүссәләм Әл-Бәли исемле ғалим үҙенең «Яуыз сихырсыларҙы ҡырыусы үткер ҡылыс» тигән китабында шундай ваҡиға тасуирлай. Берәүҙе Ҡөрьән уҡып дауалаған мәлдә, ул кеше йоҡлап китә, һәм сихыр менән индерелгән ене телгә килә: «Бынан сыҡмайым, сыҡһам да үҙеңә инәм», - ти. «Ярай, ин», - ти уға ғалим. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ен илай башлай. «Ниңә илайһың?» - тип һорағанға ул былай яуаплай: «Һиңә инеп булмай, сөнки бөгөн иртәнсәк йөҙ тапҡыр «Лә иләһә иллә-Лаһ, үәхдәһү лә шәрикә ләһ, ләһүл-мүлкү үә ләһүл-хәмдү, үә һүә ғәлә күлли шәййиң ҡадир» - тип әйткәнһең». Бер аҙҙан ен ислам динен ҡабул итеп, был кешенән сығып китә. Ысынлап та, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең сәхих хәҙисенә ярашлы, кем дә кем көн һайын йөҙ тапҡыр: «Лә иләһә иллә-Лаһ, үәхдәһү лә шәрикә ләһ, ләһүл-мүлкү үә ләһүл-хәмдү, үә һүә ғәлә күлли шәййиң ҡадир» («Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, Ул берәү, Уның иптәштәре юҡ, хаҡимлыҡ - Уныҡы, һәм бөтә маҡтауҙар - Уға, Ул һәр нәмәне эшләй ала»), - ти, шул кешегә көн һайын ун ҡол азат иткән кеүек сауап яҙылыр, унан башҡа тағы йөҙ яҡшы эш өҫтәлеп, йөҙ гонаһы юйылыр, һәм ул был көндә ҡараңғы төшкәнсе шайтандан һаҡланған булыр. Бер кем дә был кешегә ҡарағанда күберәк яҡшы ғәмәл башҡара алмаҫ, әгәр ҙә ошо һүҙҙәрҙе унан күберәк ҡабатламаһа ғына.

Әлхәмдүлилләһ, Аллаһ Тәғәлә пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) аша Исламды тулыһынса еткергән. Был диндә һәр төрлө ғилем бар. Ә дин тотоусылар төрлө бысраҡлыҡтаң, сихырҙан, насарлыҡтан йыраҡ булыр һәм шул рәүешле фани донъяла ла, мәңгелектә лә бәхеткә ирешер. Һеҙ ҙә, хөрмәтле уҡыусылар, Аллаһҡа ғына ышанып, Аллаһтан ғына ҡурҡып, бер ниндәй ҙә ендәрҙән, сихырсыларҙан ҡурҡмағыҙ - Аллаһ һеҙҙе Үҙе һаҡлар, иншаллаһ. Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә былай тигән: «Сафланған кеше генә уңышҡа ирешер, Раббыһының исемен иҫкә алыусы һәм намаҙ уҡыусы» («Бөйөк» сүрәһе, 87:14-15). Ике көнөгөҙ бер төрлө үтмәһен - һәр саҡ яҡшы яҡҡа үҙгәрергә тырышығыҙ. Динегеҙҙе өйрәнегеҙ - унда һәр нәмәгә яуап бар. Йә Аллаһ, беҙҙе тура юлдан яҙҙырмаһаң ине, беҙгә дөрөҫ һәм файҙалы ғилемдәр бирһәңсе, төрлө хәрәм эштәрҙән, насарлыҡтан, шайтандың үәсүәләренән, сихырҙан, күҙ тейеүҙән һаҡлап торһаң ине! Амин.

Шиғри тулҡында

ИҪКӘ АЛ!

Һыҙылып ҡыҙыл таң ата,
Яңы көн тыуа.
Дан таңдың хужаһына -
Лә иләһә илләЛлаһ!

Күк күкрәй, ямғыр яуғанда
Ниндәй саф һауа.
Кем һуң ямғыр яуҙырыусы,
Лә иләһә илләЛлаһ!

Ямғырҙан һуң бар йәшеллек
Һыуға туйынып ҡала.
Һәр бер япраҡ зикер әйтә:
Лә иләһә илләЛлаһ!

Болот ҡаса, ҡояш сыға,
Нуры менән ерҙе ҡоса,
Ҡоштар һайрай, йәйғор балҡый,
Күбәләктәре оса...
Бар тереклек маҡтай Уны,
Бар тереклек данлай Уны,
Бар тереклек паклай Уны.

Унан башҡа илаһ бармы,
Лә иләһә илләЛлаһ!

Шул матурлыҡ араһында,
Йәшәй әҙәм балаһы.
Тик ниңәлер иҫкә алмай
Аллаһын...

Зәңгәр күктән төшөп ҡояш,
Ҡыҙыл офоҡҡа сума...
Иҫкә ал, кеше, Раббыңды,
Лә иләһә илләЛлаһ!

Булат КӘРИМОВ.

Тәрбиә

ЙӘШ БЫУЫН

Әҙеүәт ҒӨБӘЙҘУЛЛИН,
Ҡарағол мәхәлләһе имамы

Әссәләмәғәләйкүм, хөрмәтле мосолмандар! Динебеҙ - Ислам, үҙебеҙ - мосолман. Ислам дине пак диндер, Һәр ғәмәлдәребеҙҙе йыуынып-тәһәрәтләнеп, таҙа әйберҙәребеҙҙе кейеп башҡарабыҙ. Өҫтөнлөк йәшел, аҡ әйберҙәргә бирелә. Мәрхүмдәрҙе лә йыуып, аҡ кәфенгә урап, һуңғы юлға оҙатыбыҙ.

Мосолман кешеһе үҙенә лә, тирә-яғындағы кешеләргә лә насарлыҡ ҡылмай - теле менән дә, ҡулы менән дә. Быны нисек аңларға? Әгәр ҙә беҙ тәмәке тартһаҡ - үпкәгә зыян килтерәбеҙ, араҡы эсһәк - бауыр, бөйөрҙәр эштән сыға, был үҙебеҙгә зыян килә, тигән һүҙ. Кешегә һүҙ тейҙереү, һүҙ йөрөтөү, кәрәкмәгәнгә ҡул күтәреү - кешегә зыян килтереү була. Динебеҙгә рөхсәт булғас, халыҡ араһында түбәтәй кейеп, теләһә ни ҡылып йөрөүселәр күбәйеп китте. Күптәре донъя көтмәй, хәмер эсеп көн үҙғара. Бында шул тиклем уйланһаҡ ине, мосолмандар. иман ҡайҙан килә, кем ул иманлы кеше? Иманлы булыу бала саҡтан ғаиләлә, мәктәптә башлана. Иң беренсе, ата-әсә үҙе иманлы булырға тейеш. Балаларыбыҙҙы тәрбиәләү менән беҙ үҙ үҙебеҙҙе лә тәрбиәләйбеҙ. Үҙең юғары әхлаҡлы булып, ҡылыҡтарың менән көндәлек тормошта изге эштәреңде генә балаларыңа күрһәтһәң, аңлатһаң - тәрбиәле, иманлы балалар үҫтерерһең. Әйткәндәй, Мәрйәм Солтанова исемендәге мәсеткә Өфөлә ололар ейәнләрен дә намаҙға алып килә. Уларға ҡарап, һоҡланып туя алмайһың, ололар ни ҡыла, улар ҙа тырышып-тырышып эйелә, бөгөлә, намаҙ уҡыусылар менән ҡабатлай. Бына шунан башлана иманлы, инсафлы, тәртипле балалар тәрбиәләү өлгөһө.

Көндәрҙең йыйылмаһы йома була. Аллаһы Тәғәлә донъяны бар итеп - ерҙе, һыуҙы, бөтә ғәләмде - йома көндө тәхетенә ултыра, шуға ла йома көн - байрам, ял итеү көнө булып һанала ғәрәп илдәрендә. Улар ял итеп ғаиләләре менән парктарҙа ултыра, йома ваҡыты етһә, йома намаҙына ашыға. «Йәмәғәт менән мәсеттә намаҙ уҡыу егерме ете тапҡыр сауаплы булыр» - ти Ҡөрьән Кәрим. Мосолман булыу бик оло дәрәжә ул, Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәп, тыйылғандарынан тыйылып, донъя көтөп, балалар тәрбиәләп үҫтереү ул. Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге рәсүле - Мөхәммәд ғәләйһиссәләмгә йәшерен ауаз менән төшөрөлгән дин - ислам динелер ул. Дин - ул өгөт-нәсихәт, диндә көсләү юҡ, әммә өгөтләү бар. Иманлы булырға, динебеҙҙе Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса үтәргә, Аллаһы Тәғәлә бер тип, бар тип иман килтереү - мосолман булыуҙың төп өлгөһө. Мосолман булғас, Ҡөрьән Кәримдән доғалар, аяттар уҡып, шуны балаларыбыҙға өйрәт-ергә.

Мөхәммәд ғәләйһиссәләмдең яратҡан доғаларының береһе «Рәббәнә», «И Раббым, донъялыҡта беҙгә изгелек эшләргә ғүмер бир, шул изгелебеҙҙең бәрәкәтендә йәннәтеңә насип ит, насарлыҡтарҙан, уттарҙан, ғазаптарҙан һаҡлаһаң ине» - бына ниндәй матур доға баларыбыҙға өйрәтергә була. Ғаиләбеҙ нык, балаларыбыҙ инсафлы-тәртипле булһа, илебеҙ ҙә нык булыр, ғәмәлгә яраҡлы балалар үҫтерәйек, ата-әсәйҙәр! Балаларыбыҙ илебеҙгә файҙа килтерерҙәй «халыҡ балаһы» булһын ине. Ошо изге бурысты онотмайыҡ. Әссәләмәғәләйкүм үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ. Һәммәгеҙгә лә иманлы ғүмер теләйем.